# РАБОЧАЯ ПРОГРАММА

по предмету Родной (башкирский) язык и литературное чтение

## I. Пояснительная записка

**Рабочая программа учебного предмета «Родной башкирский язык и литература» разработана на основе следующих нормативно-правовых документов:**

1.
2. **Федерального закона от 29 декабря 2012 г. № 273-ФЗ "Об образовании в Российской Федерации"**;
3. Приказа № 1089 от 5 марта 2004 "Об утверждении федерального компонента государственных образовательных стандартов начального общего, основного общего и среднего (полного) общего образования" (в соответствии с изменениями);
4. Приказа от 9 марта 2004 г. N 1312 Об утверждении федерального базисного учебного плана и примерных учебных планов для образовательных учреждений Российской Федерации, реализующих программы общего образования;
5. Постановления Главного государственного санитарного врача РФ от 29 декабря 2010 № 189 «Об утверждении СанПиН 2.4.2.2821-10 «Санитарно-эпидемиологические требования к условиям и организации обучения в общеобразовательных учреждениях»;
6. Закона "О языках народов Российской Федерации" (с изменениями и дополнениями) от 25 октября 1991 г. № 1807-I
7. Закона Республики Башкортостан «Об образовании в Республике Башкортостан» от 1 июля 2013 г. № 696-з;
8. **Концепции развития национального образования в Республике Башкортостан от 31 декабря 2009 г. № УП-730,Республиканской общеобразовательной программы развития образования на 2013-2017 годы от 30.12.2012 г.№549 с изменениями от 24.10.2013.№473;**
9. **Закона «О языках народов Республики Башкортостан»** (с изменениями и дополнениями) **от 15 февраля 1999 года № 216-з;**
10. Регионального базисного учебного плана и примерных учебных планов для общеобразовательных учреждений Республики Башкортостан, реализующих программы общего образования (Приказ министерства образования РБ № 824 от 06 мая 2014 года);
11. **Нормативной базы по предмету башкирский язык составлена в соответствии с программой по башкирскому языку для учащихся I-XIклассов школ с русским языком обучения. Составители: Усманова М.Г., Габитова З.М.-Уфа.2009.**
12. Учебного плана МАОУ Школа №37 г.Уфа Приказ № _357_ от «__31» ___ мая_____ 20_16_ г.(с изменениями Приказ№853 от 14 12.2015)
13. Положения о рабочей программе МАОУ Школа №37 Приказ № 226__ от «__18.04» 2016 г.

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙән 9-сы класы өсөн туған (башҡорт) теленән эш программаһы.
Эш прогаммаһы 34 сәғәткә бүленгән (аҙнаға 1 сәғәт).
Дәреслек: Башҡорт теле: Рус мәктәптәренең 9-сы класында уҡыусы башҡорт балалары өсөн өсөн дәреслек.. Тикеев Д.С,Ғафаров Б,Б, Хөснөтдинова Ф.Ә., – Өфө: Китап, 2006
Программа кимәле: базис
Уҡытыусының тел буйыса уҡыу- уҡытыу методик комплекты:
5-9 кластарҙа башҡорт телен уҡытыу методикаһы. Аҙнағолов Р.Ғ. Өфө: Китап,1996.
Ғафаров Б.Б. Әҙәбиәт уҡытыу методикаһы. – Өфө: Китап, 2008.
Уҡыусылар өсөн тел буйынса уҡыу- уҡытыу методик комплекты:
Башҡорт теле: Рус мәктәптәренең 5-се класында уҡыусы башҡорт балалары өсөн өсөн дәреслек. Хажин В.И., Вилданов Ә.Х. – Өфө: Китап, 2008
Программа үҙенсәлектәренең характеристикаһы:
Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I-XI кластары өсөн башҡорт теле һәм әҙәбиәте программаһы .Төҙөүселәре: Тикеев Д.С., Толомбаев Х.А., Вилданов Ә.Х., Дәүләтшина М.С., Хөснөтдинова Ф.Ә., Хажин В.И. Өфө , “Ватандаш” нәшриәте ,2005 йыл нигеҙендә төҙөлдө .
Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла:
«Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы, Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы, «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы, Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы, Башҡортостан Республикаһында Милли мәғарифты үҫтереү концепцияһы.
Программа йөкмәткеһе 3 йүнәлештән тора:

- башҡортса телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу һәм камиллаштырыу;
- башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик үҙенсәлектәрен аңлау һәм үҙләштереү;
- бәйләнешле текст менән эш итә белергә өйрәтеү.

Программала ҡуйылған маҡсат һәм бурыстар:

1. Уҡыусыларҙы башҡорт әҙәби телендә дөрөҫ һөйләшергә, өйҙә, йәмәғәт урындарында, хеҙмәт процесында башҡорт әҙәби телен практик файҙаланырға өйрәтеү.
2. Башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик нормалары буйынса белем һәм күнекмәләр биреү.
3. Башҡорт телендә нәшер ителә торған гәзит-журналдарҙы, әҙәби китаптарҙы үҙ аллы уҡып аңлау күнекмәләрен биреү.
4. Үҙ фекеренде билдәле кимәлдә бәйләнешле итеп һөйләй һәм яҙа алыу күнекмәләрен формалаштырыу.
5. Телде өйрәнеү барышында балаларҙы башҡорт халҡының фәһемле тарихы, бай мәҙәниәте, сәнғәте, әҙәбиәте, башҡорт йолалары, күренекле шәхестәре, тыуған илдең тәбиғәте менән таныштырыу, уларҙы башҡорт донъяһына алып инеү, башҡорт халҡына, уның теленә, үҙе йәшәгән төйәккә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү.
6. Бөтә һаналғандарға таяныу, рус һәм башҡорт телдәрен, әҙәбиәтен өйрәнеү нигеҙендә, балаларҙа туған телгә ихтирам тәрбиәләү, уларға илһөйәр һәм интернациональ тәрбиә биреү.

Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе
Тел буйынса башланғыс синыфтарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

Фонетика һәм орфоэпия. Өн һәм хәреф. Башҡорт теленең өндәр системаһы. Уларҙы белдергән хәрефтәр. Башҡорт теленең өндәр системаһын рус теленең өндәр системаһы менән сағыштырыу. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре, уларҙы белдергән хәрефтәр.
Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Һуҙынҡы өндәр, уларҙың һаны һәм әйтелеше. Башҡорт телендәге һуҙынҡы өндәрҙең әйтелешен рус телендәге һуҙынҡы өндәрҙең әйтелеше менән сағыштырыу. Фонетик күнегеүҙәр.
Тартынҡы өндәр, уларҙың һаны һәм әйтелеше. Башҡорт телендәге тартынҡыларҙың әйтелешен рус телендәге тартынҡыларҙың әйтелеше менән сағыштырыу. Фонетик күнегеүҙәр.
Башҡорт телендәге к-г, һ-х, н-ң, с-ç, з-ҙ тартынҡыларының дөрөç әйтелешенә күнекмәләр үткәреү, фонетик күнегеүҙәр эшләү.
Телмәр ағышында өндәрҙең бер-береһенә йоғонтоһо. Тартынҡы өндәрҙең үҙгәреше. Башҡорт теленең ҡанундарына ярашлы һөйләү күнекмәләре үткәреү.
Башҡорт телендә сингармонизм. Башҡорт телендә сингармонизм, уҡыусыларҙы уларҙың төрҙәре менән таныштырыу. Фонетик күнегеүҙәр.
Башҡорт телендә ижектәр. Ижектәрҙең төрҙәре. Башҡорт һәм рус телдәрендәге ижектәрҙе сағыштырыу. Һүҙҙәрҙе юлдан-юлға күсереү ҡағиҙәләре менән танышыу.
Башҡорт телендә баçым, уның үҙенсәлектәре. Баçымдың һуңғы ижеккә төшөүе һәм ялғау ҡушҡан һайын күсә барыуы. Башҡорт һүҙҙәрендәге һәм рус теленән һуңғы осорҙа үҙләштерелгән һүҙҙәрҙәге баçымды сағыштырыу.
Башҡорт телендә һүҙҙәрҙең тамыры, ялғауҙар тураһында төшөнсә биреү. Тамырға ялғау ҡушҡанда һүҙҙәрҙең мәғәнәһе үҙгәреүен күҙәтеү, күнегеүҙәр эшләү.
Башҡорт һәм рус телендә интонация һәм уның төрҙәре, төп өлөштәре: логик баçым, пауза, фраза баçымы, телмәр мелодикаһы, тойғо баçымы.
Башҡорт һәм рус телдәрендә интонацияның үҙенсәлектәрен асыҡлау. Башҡорт телендәге ябай һөйләмдәрҙе дөрөç интонация менән уҡырға өйрәтеү күнекмәләре биреү.
Башҡорт теленең һүҙлек байлығы, уның сығанаҡтары. Төп башҡорт һүҙҙәре һәм үҙләштерелгән һүҙҙәр. Бер мәғәнәле һәм күп мәғәнәле һүҙҙәр. Һүҙҙәрҙең күсмә мәғәнәлә ҡулланылыуы.
Башҡорт телендә нығынған һүҙбәйләнештәр, улар аңлатҡан мәғәнәне асыҡлау. Нығынған һүҙбәйләнештәрҙе һүҙҙәр менән сағыштырыу, алмаштырыу күнегеүҙәре. Нығынған һүҙбәйләнештәрҙең телмәрҙәге ролен билдәләү. Башҡорт һәм рус телендәге һүҙбәйләнештәрҙе сағыштырыу, тәржемә итеү, улар менән һөйләмдәр төҙөү.
Башҡорт телендә һүҙьяһалыш. Һүҙ составы. Башҡорт теленең агглютинатив тел булыуына күнегеүҙәр. Тамыр. Нигеҙ. Ялғауҙар. Ялғауҙарҙың төрҙәре: һүҙ һәм төр яһаусы ялғауҙар, үҙгәртеүсе ялғауҙар. Ялғауҙарҙың варианттары менән практик таныштырыу, ул варианттарҙың барлыҡҡа килеү сәбәптәрен аңлатыу, практик күнегеүҙәр башҡарыу.
Рус теленән үҙләштерелгән бер төркөм һүҙҙәрҙә ялғау ҡушҡанда һүҙ аҙағындағы тартынҡы өндөң төшөп ҡалыуын, йәки һуҙынҡылар өçтәлеүен практик үҙләштереү.
Ялғауҙар ҡушҡанда ҡайһы бер һүҙҙәрҙә өндәрҙең сиратлашыуы. Практик танышыу.
Башҡорт һәм рус телдәрендәге һүҙьяһалыш юлдарын асыҡлау, уларҙың оҡшашлығы һәм айырмаһын билдәләү: тамыр һүҙ, яһалма һүҙ, ҡушма һүҙ.
Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөç яҙылышын үҙләштереү, иçтә ҡалдырыу, нығытыу буйынса практик эштәр башҡарыу.

Башҡорт теле буйынса йыл буйына үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Бәйләнешле телмәр үҫтереү. Орфоэпик ҡағиҙәләрҙе дөрөҫ ҡулланыуға, тексты интонация менән уҡыуға күнегеүҙәр.
Әҙәбиәт.
С. Муллабаев. Шатлыҡлы иртә.
Тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Уҡыусыларҙың йәйге тәьҫораттары менән уртаҡлашыу, уҡыу, белем, яңы уҡыу йылы тураһында әңгәмә ойоштороу.
Б. Бикбай. Туған тел. Р. Ғарипов. Туған тел.
Шиғырҙарҙа туған телде данлау, хөрмәтләү мотивтарының сағылышы. Тасуири уҡыу күнекмәләре. Туған телдең ҡәҙере, уны белеүҙең мөһимлеге тураһында әңгәмә.
Әминбәк (башҡорт халыҡ әкиәте).
Әкиәттең йөкмәткеһен үҙләштереү, әкиәт стилендә һөйләү күнекмәләре үткәреү. Һүҙлек өҫтөндә эш.
К. Кинйәбулатова. Күҙ еткәс. Ф. Рәхимғолова. Күҙгә Урал. Р. Ғарипов. Торналар. Н. Иҙелбай. Дүрт миҙгел.
Б. Ноғоманов. Йәйбикә менән Күҙбикә.
Әҫәрҙәрҙә күҙгә тәбиғәттең тасуирланыуын ҡарау, уны үҙең күргәндәр менән сағыштырыу. Шиғырҙарҙы тасуири
уҡыу, һүрәттәр төшөрөү. Яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Сағыштырыу тураһында төшөнсә биреү.
М. Кәрим. Сыйырсыҡ балаһы. А. Йәғәфәрова. Яҡшылыҡ.
Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Үҙ һүҙҙәрең менән һөйләү күнекмәләре үткәреү. Хикәйә менән әкиәтте сағыштырыу.
Н. Әминева. Тыуган ер. Д. Бураҡаев. Урал тауҙары. Тыуған ер (ҡобайыр). Т. Ғәниева. Уралиә тигән ил (әкиәт).
Р. Ниғмәти. Йәмле Ағиҙел буйҙары (поэманан өҙөк). Ф. Рәхимғолова. Мин – Башҡортостандан. Ә. Вахитов. Аҡһаҡал аманаты.
«Минең тыуған төйәгем» темаһына әңгәмә. Тасуири уҡыу күнекмәләре. Тыуған ер, тыуған төйәк, Башҡортостан, Урал тураһындағы башҡа әҫәрҙәрҙе иҫкә төшөрөү. Ф. Мөхәмәтйәнов. Ҡыҙыҡ һүҙ. Ф. Иҫәнғолов. Хәмит күпере. Йылмайыу. Р. Ғарипов. Алма.
Шиғырҙар өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Әкиәттәрҙең һәм хикәйәнең йөкмәткеһен үҙләштереү, уларҙа дуҫлыҡ, хеҙмәт темаһының сағылышын ҡарау. Образдарға характеристика биреү. Яңы һүҙҙәр үҙләштереү.
С. Әлибаев. Ҡыш. Н. Мусин. Ҡоралайҙар. В. Әхмәҙиев. Ҡышҡы урманда. Ҡ. Даян. Шыршы. М. Кәрим. Ҡыш бабай бәләкәй саҡта.
Шиғырҙарҙа ҡышҡы тәбиғәттең матурлығының, шыршы байрамының тасуирланыуы. Тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Хикәйәләрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, һөйләргә өйрәнеү. Образдарға характеристика биреү. Яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Шиғри телмәр һәм проза телмәре. Хикәйәләү тураһында төшөнсә.
Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады. Мәҡәлдәр. Йомаҡтар. Таҡмаҡтар. Йырҙар.
Башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижады тураһында дөйөм белешмә биреү, уның традицион жанрҙарын барлау, һәр жанрға хас үҙенсәлектәрҙе асыҡлау. Әкиәттәрҙең тематик төркөмдәрен ҡарау. Әкиәттәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, әкиәт стилендә һөйләү күнекмәләре үткәреү. Әкиәт геройҙарына характеристика биреү. Мәҡәлдәрҙең, йомаҡтарҙың, таҡмаҡтарҙың, йырҙарҙың жанр үҙенсәлектәренә төшөнөү.
Р. Солтангәрәев. Эшләп ашаһаң. З. Биишева. Йәшәү – хеҙмәт.Әҫәрҙәрҙә хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләү, һөнәр һайлау. «Минең буласаҡ һөнәрем» темаһына әңгәмә. Төрлө һөнәрҙәр тураһында мәҡәлдәр йыйыу, йырҙар тыңлау.
Д. Бүләков. Яралы китап. Ғ. Рамазанов. Ағайым хаты. Ә. Вахитов. Өс бөртөк бойҙай. М. кәрим. Дан кәпәс түгел.
Н. Мусин. Атайымдың ос һәнәге.

Хикәйәләрҙә һуғыш темаһының бирелеше. Фронтта һәм тылда ил азатлығы өсөн көрәш. Образдарға характеристика. Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен тасуири һөйләргә өйрәнеү. Һүҙлек өҫтөндә эш. Тәржемә күнекмәләре үткәреү. Хикәйә тураһында төшөнсә.
Ә. Әминев. Әсикмәк. Ф. Мөхәмәтйәнов. Әсәйем ҡулы. Әсә йөрәге (ҡобайыр). Ғ. Аллаяров. Таҫтамал.
К. Кинйәбулатова. Әсә күңеле.
Әҫәрҙәрҙә әсә образының бирелешен асыҡлау. Шиғырҙарҙы тасуири итеп уҡыу күнекмәләре үткәреү. Хикәйәләрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, һөйләргә өйрәнеү.
Р. Назаров. Яҙ килә. З. Хисмәтуллин. Сыйырсыҡ. С. Әлибаев. Яҙҙы кем килтергән? М. Кәрим. Һеңлемдең төшө.
Ҡ. Даян. Торналар. Р. Ғарипов. Һабантурғай йыры.
Әҫәрҙәр өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Шиғырҙарҙа миҙгелдәр алмашыныуы, тәбиғәттең уяныуы, яҙ килеүе, ҡоштарҙың, хайуандарҙың тормошондағы үҙгәрештәрҙе күҙәтеү. Хикәйәләрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, һөйләү, тәржемә күнекмәләре үткәреү. Яҙ тураһында әңгәмә үткәреү, ижади эштәр башҡарыу. Йәнләндереү тураһында төшөнсә.
«Айыу менән бал ҡорттары» башҡорт халыҡ әкиәте. Б. Ноғоманов. Ҡарһылыу менән Яҙһылыу. Ғ. Хисамов. Аҡъяурын сал бөркөт.
Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, һөйләү, һүҙлек, тәржемә эшен башҡарыу. Әкиәт геройҙарының эштәрен барлау. Ауыҙ-тел ижады һәм әҙәбиәт.
М. Кәрим. «Өс таған» повесынан өҙөктәр.
Өҙөктәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, ҡысҡырып, дөрөҫ интонация менән уҡыу күнекмәләре үткәреү. Әҫәрҙә ысын дуҫлыҡтың сағылышын ҡарау, дуҫлыҡ тураһында әңгәмә ойоштороу. Ғабдулла, Вәзир, Айҙар образдарына характеристика биреү.
А. Игебаев. Еңеү көнө. К. Мәргән. Ҡурайсының үлеме. Р. Ниғмәти. Еңеүселәргә дан. В. Исхаҡов. Миҙал һәм малай.
Еңеү көнөнә арналған шиғырҙарҙы тасуири уҡыу. Шағирҙарҙың был иҫтәлекле тарихи ваҡиғаға, еңеүселәргә мөнәсәбәтен, ватансылыҡ тойғоларының сағылышын күҙәтеү, Еңеү көнө, Бөйөк ватан һуғышы, халҡыбыҙҙың ил азатлығы өсөн һуғышта күрһәткән батырлығы тураһында әңгәмәләр ойоштороу, ижади эштәр башҡарыу. Яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереү, тәржемә эштәре башҡарыу. Еңеү тураһында йырҙар өйрәнеү.
Р. Назаров. Тракторсы йыры. З. Хисмәтуллин. Урман ҡунағы. С. Агиш. Турыҡай. М. Ғафури. Һарыҡты кем ашаған?
Шиғырҙы тасуири итеп уҡыу күнекмәләре үткәреү. Үҙ һөнәреңә, хеҙмәткә һөйөү, ил, халыҡ, киләсәк алдында бурыс төшөнсәләре тураһында фекер алышыу. Сәсмә әҫәрҙәрҙе тасуири итеп уҡыу үҙенсәлектәренә төшөнөү. Мәҫәлдәрҙең мәғәнәһенә төшөнөү, йөкмәткеһен үҙ һүҙҙәреү менән һөйләп өйрәнеү. Әҫәрҙе ролдәргә бүлеп уҡыу, образдарға характеристика биреү.
Аллегория һәм мәҫәл тураһында төшөнсә.
С. Муллабаев. Йомарт йәй. Б. Рафиҡов. Йондоҙ һанаусы малай. М. Кәрим. Ап-аҡ мөғжизә.
Шиғырҙа йәйге тәбиғәттең тасуирланыуы. Үҫемлектәрҙең, бөжәктәрҙең тормошон күҙәтеү. Йәй, йәйге каникул, йәйге эштәр тураһында әңгәмәләшеү, ижади эштәр башҡарыу. Тасуири уҡыу күнекмәләре. Хикәйәләрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, образдарға характеристика биреү, яҙма эштәр эшләү. Йәйге тәбиғәткә экскурсия ойоштороу.

**Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар**

1. Уҡытыусы уҡыған йәки һөйләгән, үҙең уҡыған тексты аңлай алыу;
2. Уҡыған әҫәр, картина, экскурсия, ҡараған фильм буйынса әңгәмәлә ҡатнашыу;
3. Предметты, күренеште элементар рәүештә һүрәтләү, уға үҙ мөнәсәбәтеңде белдереү;
4. Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙе, поэтик әҫәрҙәрҙе дөрөҫ интонация менән һөйләү;

5. 8 – 10 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү;
6. Тексты шыма, аңлы, дөрөҫ, тотош һүҙләп уҡыу, логик баҫымдарҙы, паузаларҙы дөрөҫ әйтеү; тасуири уҡыу; текстың өлөштәренә, иллюстрацияларына исем биреү, өҙөк буйынса план төҙөү; текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе, һүрәтләү, тасуирлау сараларын табыу, мәғәнәләрен аңлатыу, һүҙлектәр менән эш итеү;
7. Хикәйә, әкиәт, мәҡәл, йомаҡ жанрҙарын практик айыра белеү;
8. Ҙур булмаған һөйләмдәрҙе күсереп һәм яттан яҙыу; текст, күҙәтеүҙәр йәки экскурсия буйынса һорауҙарға яуап яҙыу; бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү;
9. Өйрәтеү характерындағы изложение, иншалар яҙыу; яҙғанды элементар формала камиллаштыра алыу.

**Уҡыу-уҡытыу программаһында планлаштарылған һөҙөмтәләрҙе үҙләштерелеүен баһалау**

1. Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була.

Уларға түбәндәгеләр инә:

- башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
- тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
- дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;
- һорауҙарға яҙма яуаптар һәм иншалар;
- тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар һ.б. төҙөү.

2. Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.
3. Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Бының өсөн башҡорт теленән һәр класта түбәндәге күләмдә контроль эштәр, яҙма эштәр үткәреү ҡарала:

- контроль күсереп яҙыу – 1,
- һорауҙарға яуап – 1,
- контроль диктант – 5,
- изложение – 1;
- инша – 2.

Яҙма эш төрҙәре (изложение,инша) яҙыу уҡыусыларҙың уҡыу кимәленә, белеменә, мөмкинселегенә ҡарап уҡытыусы ҡарамағына ҡалдырыла һәм улар урынына шул уҡ күләмдә түбәндәге яҙма эштәр үткәрергә мөмкин:

-карточкалар менән эш;
-тест;
-һүрәт буйынса һөйләмдәр төҙөү;
-текста һөйләмдәрҙә һүҙҙәр тәртибе;
-терәк текстар менән инша яҙырға өйрәнеү:

-hүҙлек диктанты;
-hөйләмдәр төҙөү;
-hүҙлек менән эш;
-hүрәтләү иншаhы;
-синквейн төҙөү (слайд төҙөү: шәжәрәләр, минең ғаиләмде
**Яҙма эш төрҙәре (**изложение,инша) яҙыу уҡыусыларҙың уҡыу кимәленә, белеменә, мөмкинселегенә ҡарап уҡытыусы ҡарамағына ҡалдырыла hәм улар урынына шул уҡ күләмдә түбәндәге яҙма эштәр үткәрергә мөмкин:
-карточкалар менән эш;
-тест;
-hүрәт буйынса hөйләмдәр төҙөү;
-текста hөйләмдәрҙә hүҙҙәр тәртибе;
-терәк текстар менән инша яҙырға өйрәнеү:
-hүҙлек диктанты;
-hөйләмдәр төҙөү;
-hүҙлек менән эш;
-hүрәтләү иншаhы;
- слайд төҙөү: шәжәрәләр, минең ғаиләмде…
II. Диктанттарҙы баhалау
Уҡытыусы башта тексты уҡып сыға. Өйрәнелмәгән орфограммалы hүҙҙәр алдан уҡ таҡтала яҙылған булырға тейеш. Уҡытыусы синыфтың әҙерлегенә ҡарап, әйтеп яҙҙырыу темпын үҙе билдәләй.
Тексты орфоэпия, әҙәби тел нормаларына ярашлы уҡыу талап ителә. Уҡытыусыға ярҙам итеү маҡсатында йыйынтыҡ авторҙары текстар аҙағында грамматик эш төрҙәре тәҡдим иттеләр.
Диктант яҙылып бөткәс, уҡыусыларға тексты уҡып hәм тикшереп сығыу рөхсәт ителә. Ләкин диктантты баштан уҡ уйлап, аңлап, иғтибарлы яҙырға өйрәтергә hәм hуңғы тикшертеү менән мауыҡмаҫҡа кәрәк. Уҡытыусы тексты икенсе тапҡыр тулы килеш уҡып сыҡҡас та, грамматик эш тәҡдим ителергә тейеш.
Контроль диктантты тикшергәндә, түбәндәге хаталар төҙәтелә, ләкин баhалағанда иҫәпкә алынмай:
1) мәктәп программаhына индерелмәгән ҡағиҙәгә яҙылыштар;
2) әле үтелмәгән ҡағиҙәгә яhалған хаталар;
3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуацияға хаталар;
4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеhен яҙыу (мәҫәлән: ата урынына аша).
Диктантҡа билдә ҡуйғанда шулай уҡ хаталарҙың характерына иғтибар итергә кәрәк. Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталылыҡты билдәләү өсөн әhәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Бындай хаталарҙың икеhе берәүгә иҫәпләнә.
Түбәндәге хаталар тупаҫ булмаған хаталарға инә:
1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;
2) бәйләү юлы менән яhалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;
3) бер тыныш билдәhе урынына икенсеhен ҡуйыу;

4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.
Диктант бер генә билдә менән баһалана.
«5» билдәһе — тупаҫ булмаған 1 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә,
«4» билдәһе 4 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 6 пунктуацион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.
«3» билдәһе 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.
«2» билдәһе 9 орфографик, 9 пунктуацион йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Хаталар һаны 15 орфографик хатанан да артып китһә, «1» билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.
Әгәр контроль диктанттан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.
Грамматик биремдәрҙе баһалағанда түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:
«5» билдәһе бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,
«4» билдәһе эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,
«3» билдәһе яртыһынан әҙерәге дөрөҫ әшләнгәндә,

**Әҙәбиәт буйынса**

Әҙәбиәт буйынса ла уҡыусы белемен баһалауҙың төрлө юлдары һәм үҙенсәлектәре бар, Исеменән үк күренеүенсә, әҙәбиәт дәресе уҡыусыларҙы әҙәпкә,тәртипкә, кешелеклелеккә өйрәтеү менән бергә матурҙы йәмһеҙҙән, яҡшыны насарҙан айырырға ла күнекмә бирә. Тимәк, һәр әҙәбиәт дәресе уҡыусыға тәьҫир итерлек, һоҡланып ултырырлыҡ та булырға тейеш. Шуның менән бергә һәр әҙәбиәт дәресендә тиерлек уҡыусы белеме лә баһаланырға, сиреккә, йыллыҡҡа билдәләр ҡуйылырға бурыслы. Хәҙер әҙәбиәт дәрестәрендә баһалар ҡуйылыу мөмкинлектәрен, юлдарын ҡарап үтәйек.

Уҡыу тиҙлеген тикшереү

Башланғыс кластарҙан алып, һәр бала билдәле бер кимәлдә, тиҙлектә шыма итеп уҡый белергә лә бурыслы. Ғөмүмән, етеҙ, дөрөҫ, тасуири уҡыу, уҡырға өйрәтеү әҙәбиәт дәрестәренең тәүге мөһим талаптарының береһе. Уны, йәғни уҡыу тиҙлеген, 1 бала минутына күпме һүҙ укыуына ҡарап билдәләйҙәр. Һәр сирек һайын бер тапҡыр уҡыу тиҙлеге тикшерелә. Баһалар класс журналына ҡуйыла. Түбәндә башланғыс кластарҙан алып, уҡыусы минутына күпме һүҙ уҡырға тейеш булған һандар килтерелә. Уларға ҡарап, уҡыу тиҙлегенә ниндәй талаптар ҡуйылғанын билдәләргә мөмкин.

**9 г класы. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте. (туған тел) Аҙнаға 1 сәғәт. Бөтәһе – 34 сәғәт**

| № | Лексик тема | Грамматик тема | Сәғәт тәр һаны | Уҡыусыларҙың эшмәкәрлеге | Өйгә эш | Дата | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | Пл | Фа |
| 1. | Художестволы әҙәбиәт - һүҙ сәнғәте. Әҙәби мираҫ | Үтелгәнде ҡабатлау. | 1 | текст уҡыу, яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереү, һорауҙарға яуап биреү, һөйләмдәр төҙөү. | | 7.09. | |
| 2. | Халыҡ ижады һәм яҙма әҙәбиәт. | Рәүеш һәм уның телмәрҙә ҡулланышы. | 1 | ижадын өйрәнеү. Шиғырҙы уҡып сыҡҡандан һуң, көҙ билдәләрен билдәләү. Көҙгө тәбиғәт тураһында һүҙ алып барыу. | 11-се күнегеү, 9-сы бит | 14.09. | |
| 3. | Инеш эш. Диктант . Башҡорт халыҡ ижады. | Рәүештәрҙе билдәләргә | 1 | | | 21.09. | |
| 4. | Хаталар өҫтөндә эш. Башҡорт халыҡ ижады һәм уның традицион жанрҙары. | Рәүештең төҙөлөшө. | 1 | Тексты уҡыу. Йөкмәткеһе буйынса әңгәмә ҡороу.. Телмәр үҫтереү. | 17-се күнегеү, 11-се бит | 28.09. | |
| 5. | Халыҡ ижадының сәсмә формалары. | "Рәүештәр" | 1 | Белешмәне уҡыу. Берәй ҡош тураһында уҡыусыларҙан һөйләтеү. | 19-сы күнегеү, 12-се бит | 5.10. | |
| 6. | «Урал батыр» эпосы – халҡыбыҙҙың рухи ҡомартҡыһы | Хаталар өҫтөндә эш. Синтаксис. | 1 | эпосты тасуири уҡыу. Һорауҙарға яуап биреү. | 33-сө күнегеү, 20-се бит | 12.10 | |
| 7. | Инша. Ауыҙ-тел ижады - халыҡ күңеленең көҙгөһө | "Ярҙамсы һүҙҙәр" | 1 | | | 19.10 | |
| 8. | Хаталар өҫтөндә эш. Эпоста үлемһеҙлек темаһының сағылышы. | Ике составлы Һөйләмдәр. | 1 | Эпосты тасуири уҡыу. Һүҙлек өҫтөндә эшләү. | Тасуири уҡырға | 26.10 | |
| 9. | "Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпосы. | Һөйләмдең киҫәктәре. | 1 | эпос тип теге йәки был күренеш, предмет, атаманын килеп | 40-сы күнегеү, 22-се бит | 09.11. | |

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | сығышын аңлатҡан халыҡ хикәйәһенә әйтәләр.Эпос буйынса, башҡорт һүҙенең килеп сығышын тикшереү. | | | |
| 10. | Эпостарҙа батыр образы. Боронғо әҙәби әҫәрҙәр. «Ҡисса-и-Йософ». | Тиң киҫәктәр. Тестар. | 1 | Тексты уҡыу. Тәржемә итеү. | 44-се күнегеү, 25-се бит | 16.11 | |
| 11. | Уғыҙнәмә. Хөсрәү вә Ширин.Буҙъегет. Шәжәрәләр. | Эйәрсән һөйләм төрҙәре | 1 | Теманы үткәндә уҡыусыларға үҙҙәре йәшәгән төбәк, республиканың күренекле урындары, ер-һыу, тау атамалары тураһында мәғлүмәт биреү. | 52-се күнегеү, 29-сы бит | 23.11. | |
| 12. | Урта быуат әҙәби ҡомартҡылары. Хәрәзми "Мөхәббәтнамә әҫәре | өҫтәлмәлектәрҙең айырымланыуы. | 1 | Контроль күсереп яҙыу. Башҡорт телендәге үҙенсәлекле хәрефтәргә иғтибар итеү, дөрөҫ яҙыу. | ҡабатлау | 30.11 | |
| 13. | Әҙәбиәттә азатлыҡ көрәше. Батыршаның хаты. | Аныҡлаусыларҙың айырымланыуы. | 1 | Шиғыр уҡыу, яңы һүҙҙәр менән танышыу. Һорауҙарға яуап биреү. | Тасуири уҡырға | 7.12 | |
| 14. | Синыфтан тыш укыу. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Йыраузар.Боронғо йыраузар: Һабрау, Асан-Ҡайғы, Ҡаҙтуған. | Хәл әйтеме һәм уларҙың айырымланыуы. | 1 | . Өҙөктө тасуири уҡырға. Хәлдәрҙе табып, төрөн билдәләргә. | 57-се күнегеү, 31-се бит | 14.12 | |
| 15. | Контроль яҙма эш. Башҡорт халыҡ ижады | диктант | 1 | Үтелгәндәрҙе нығытыу, белем тикшереү | | 21.12 | |
| 16. | Хаталар өҫтөндә эш. Буранбай, Ишмөхәмәт, Ғәбит сәсәндәр. | Тулы һәм кәм һөйләмдәр | 1 | Сәсәндәр тураһында асыҡлау. Тексты уҡыу, йөкмәткеһен һөйләү. Һорауҙарға яуап биреү. | 61-се күнегеү, 34-се бит | 28.12 | |

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | Телмәр үҫтереү. | | | |
| 17. | Ҡобағош, Ҡарас,<br>Байыҡ сәсәндәр. | Бер составлы һөйләмдәр | 1 | Сәсәндәртураһында белгәндәрҙе нығытыу, текстын йөкмәткеһен һөйләргә өйрәтеү. | Тасуири уҡырға | 18.01 | |
| 18. | Ижади эш. Сәсәндәргә эйәреп…. | өндәш һүҙҙәр | 1 | Тексты уҡыу, йөкмәткеһен һөйләү. Телмәр өҫтөндә эшләү. Һүҙҙәрҙе тәржемә итеү. | 64-се күнегеү, 37-се бит | 25.01 | |
| 19. | Синыфтан тыш уҡыу.<br>XX быуатта халыҡ сәсәндәре. Тест. | Инеш һүҙ. Инеш һөйләм. | 1 | , тексты тасуири уҡыу, хәлдәрҙе табып, төрөн билдәләү. | 74-се күнегеү, 40-сы бит | 1.02 | |
| 20. | Аҡһаҡалдарҙың алтын һүҙе. | Изложение | 1 | Ҡыш темаһы буйынса үтелгәндәрҙе иҫкә төшөрөү, ҡыш миҙгеленең үҙенсәлеген дөрөҫ билдәләү. Һүҙлек байлығын үҫтереү. | 83-сө күнегеү, 44-се бит | 8.02. | |
| 21. | С.Юлаев тормошо һәм ижады. | "Кушма һөйләм. | 1 | . Шиғырҙы тасуири уҡыу, йөкмәткеһен һөйләү. Һорауҙарға яуап биреү. | Тасуири уҡырға | 15.02 | |
| 22. | Салауат батыр - йырсы<br>һәм шағир. | Теҙмә ҡушма һөләм | 1 | С.Юлаевтың тормош юлын һәм ижадын өйрәнеү. Шиғырҙы тасуири уҡыу, йөкмәткеһен һөйләү. Һорауҙарға яуап биреү. | Тасуири уҡырға | 22.02 | |
| 23. | С.Юлаев ижады. Әҙәбиәттә, сәнғәттә Салауат Юлаев образы. | Эйәртеуле ҡушма һөйләм | 1 | Тексты уҡырға, тәржемә итергә. | 88-се күнегеү, 49-сы бит | 1.03. | |
| 24. | Рус ғалимдары һәм яҙыусылары ижадында Башҡортостан темаһы | Теҙмә һәм ҡушма һөйләмдәр | 1 | Эҙләнеү эше | 99-сы күнегеү | 7.03. | |

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 25. | Яҙма эш. Изложение. Башҡортостан тураһында рус яҙыусылары | Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр | 1 | | 101- се күнегеү | 15.03. | |
| 26. | Хаталар өҫтөндә эш. М. Аҡмулла – бөйөк мәғрифәтсе. | Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр | 1 | Аҡмулла тормошо һәм ижады менән танышыу | Шиғыр ятларға | 22.03 | |
| 27. | М. Аҡмулланың шиғыр-ҡобайырҙары. | Теҙемдәр һәм уларҙа тыныш билдәләре. | 1 | | | 5.04. | |
| 28. | Өмөтбаевтың тарихи-этнографик хеҙмәттәре. Р.Фәхретдинов повестары. | Эйәрсән хәл һөйләмдәр | 1 | Тарихи-этнографтары менән танышыу, уларҙы таный һәм улар ижады тураһында | 102-се күнегеү, 54-се бит | 12.04. | |
| 29. | Р.Фәхретдиновтың нәсихәттәре. | Нөктәле өтөр ҡуйыу осраҡтары | 1 | Тексты уҡыу. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙе һүҙлек ярҙамында тәржемә итеү. | 105-се күнеге, 56-сы бит | 19.04. | |
| 30. | С.Яҡшығолов ижадында халыҡ яҙмышы сағылышы. | Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр | 1 | С.Яҡшығолов ижадын өйрәнеү. Тексты уҡырға, тәржемә итергә. | 111-се күнеге, 58-се бит | 26.04 | |
| 31. | Ф.Сөләймәнов. Тормош юлы. Башҡорт моңо. | Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр | 1 | Ф.Сөләймәнов тормош юлын һәм ижадын өйрәнеү. Шиғырҙы тасуири уҡыу. | Тасуири уҡырға | 3.05 | |
| 32. | Ф. Сөләймәнов "Салауат батыр" пьесаһы | теҙемдәр | 1 | “ Тексты уҡыу, тәржемә итеү. Йөкмәткеһен һөйләү. | 117-се күнегеү, 61-се бит | 10.05 | |
| 33 | Контроль диктант М.Ғафури. Тормошо һәм ижады.«Шатлыҡ», «Ул кем?», «Көс» шиғырҙары | Тура телмәр | 1 | Гафури ижады менән танышыу | Һүҙлек эше | 17.05 | |
| 34 | Ш.Бабич. Тормош юлы. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау | Хаталар өҫтөндә эш. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 1 | Проект эшен өйрәнеү | ҡабатларға | 24.05 | |